# Әбй … район



# …ы

# тәҡдим итә

Матурлыҡты тоя белгән кешенең тормош юлы ла матур.



Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Әбйәлил районының Ким Әхмәтйәнов исемендәге, Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге премиялар лауреаты, шағирә, һәүәҫкәр композитор, драматург.



*Зөһрә Хәдит ҡыҙы Фәйзуллина*

Ҡай берәүҙәр шашып дала һөйә,
Ә мин ғашиҡ бейек тауҙарға.
Күкһелләнеп, күңелдәрҙе арбап,
Саҡырып тора әллә ҡайҙарҙан.
Тауҙар! Тауҙар!
Яндарыңа ҡайтһам
Асылғандай ғаләм йәмдәре.
Ҡорһаҡһыған йәнем моңға тула,
Еңеләйә донъя ғәмдәре...
(“Тауҙарым”)




Зөһрә Фәйзуллина
Үҫеп етербеҙ әле!
6+
Зөһрә Фәйзуллина
ЙӨРӘГЕМДӘ
СЫҢЛАР
БЕР ЙЫР

# Зәки Вәлиди исемендәге Республика китапханаһында **«Уҫеп етербеҙ әле»** исемле китаптын исем туйы




ИДДӘ БАСЫЛГАН
ИЗДАННЫЕ ЗА




Зөһрә Фәйзуллина
Илекле Кыр
Йырҙар


Зөһрә Фәйзуллина
Етегән йондоҙ




*Зөһрә Фәйзуллина*

**ҠОТ ҠАЙТАРЫР АЙСЫУАҠ**

*Әкиәт-пьеса*

**Ҡатнашалар:**

Айсыуаҡ.
Мәскәй әбей.
1-се ҡыҙ, күгәрсен (Таңһылыу).
2-се ҡыҙ, күгәрсен (Көнһылыу).
3-сө ҡыҙ, күгәрсен (Айһылыу).
Ҡабан.
Бөркөт.
Тимерсе.
1-се кәмитсе.
2-се кәмитсе.
3-сө кәмитсе.

Сәхнәгә алып барыусылар сыға. Улар йыр башҡара.

Тамашаны беҙ башлайбыҙ,
Йыйылығыҙ майҙанға!
Туйғансы көл, йә илап ал,
Күңел сафланһын ғына!

Ер шары буйлап гиҙәбеҙ,
Юлыбыҙҙа юҡ картә.
Ямғыр түгел — таштар яуһын,
Артист кәмит күрһәтә.

Ашап-эсеү онотола
Сәхнәлә булған саҡта.
Роль өҫтөндә эшләгәндә,
Серем итмәйбеҙ хатта!

## З. Фәйзуллинаның баҫылған китаптары исемлеге:

1.Етегән йондоҙ: балалар һәм үҫмерҙәр өсөн пьесалар.- Өфө: Китап, 2007.-128 б.

2. Мөғжизәләр иле сал Урал. Легенда – әкиәт. // Тамаша. – 2000. – №3. – б. 43-54.

3. Фәйзуллина З. Илекле ҡыр. Йырҙар. – Сибай, 1993. – 40 б.

4. Шиғырҙар.  Балалар әҙәбиәте антологияһы. – Өфө:Китап. 2014.- б. 196-198.

**Зөһрә Фәйзуллинаның тормош юлы һәм ижады тураһында:**

1) З. Файзуллина /Абзелил: легенды и быль. – Уфа, 2011. – с. 252

2) Зөһрә Фәйзуллина //Ағиҙел. – 2000. – №7. – б. 46

3) Исмәғилев А. Күңелемдең иләҫ – миләҫ сағы.: // Йәшлек. – 2009. – 25 апрель. – б.7.

4)Ҡотоева Г. Мәңге асылыр сер // Башҡ. Ҡыҙы. – №7. – б. 6-8.

5) Ҡусҡарбаева Г.Ә. З.Х. Фәйзуллина // Башҡ. Уҡытыусыһы, 2016. – б.95

6) Фәйзуллина З. Мин - оҙон тиҫбеләләр нәҫеленән // Тамаша. – 2010. – №4. – б. 45-48

7) Фәйзуллина З. Бала сағы хәтирәләренән...// Шоңҡар. – 2015. – №1. – б. 29.43

8) Ырыҫҡужина Р., Зөһрә - ай ҡыҙы //Ағиҙел. – 2002. – №12. – б. 150-151





Зөһрә Хәдит ҡыҙы Файзуллина Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында 1946 йылдың 29 июнендә уҡытыусылар ғаиләһендә донъяға килә.

Урта мәктәптән һуң Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай.











1969-1980 йылдарҙа Әбйәлил районы мәктәптәрендә белем бирә. Артабан Сибай ҡалаһында мәктәп – интернатта һәм Сибай педагогия колледжында эшен дауам итә.

2005 йылдан 2012 йылға тиклем Сибай ҡалаһындағы Сулпан башҡорт балалар театрының әҙәби бүлеген етәкләй. “Атайсал” төбәк гәзитендә мөхәррир булып эшләй.





**Тыуған көнөм етһә,шатлыҡтарым арта**
**Ишектәрем асыҡ дуҫтарға.**
**Алыҫ араларҙы яҡын итеп,**
**Ашығалар мине ҡотларға.**
**Саф йөрәктән сыҡҡан изге теләктәре**
**Ҡанат ҡуя минең күңелгә.**
**Дуҫлыҡ тоғролоғон, дуҫлыҡ йылылығын**
**Тоям дуҫтар, ғүмер ғүмергә**
**Әллә ҡайҙа була моңһоу минуттарым**
**Яҡындарым янда бар саҡта.**
**Сәскәләрҙең алын, сәскәләрҙең алын**
**Күрәм, дуҫтар, һеҙҙең ҡосаҡта.**

(Йыр “Тыуған көнөм етһә”
З.Фәйзуллина һүҙҙәре һәм муз.)

**Музыкаль дисктары:**
«Ишектәрем асыҡ дуҫтарға», «Тәңкә һалдым», «Күңелемдең иләҫ – миләҫ сағы».











# Республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипова менән




Туй тантанаһы 1968 йыл 23 ноябрь





Фəйзуллиндар ғаиләһе



# Тағы бергә йыйылыштыҡ…



**Фәттәховтар ғаиләһе**

“Йәшәйешкә унын үҙ ҡарашы, үҙ үлсәме. Ә үлсәме унын – изгелек һәм миһырбанлыҡ, беҙ йәшәгән ерҙе йомартыраҡ, йәмлерәк итеп күрергә ынтылыу. Ул аҡыллы ла, сабыр ҙа исеменә есеме тап килеп торған, йондоҙҙай балҡыған ил инәһе”

Хәйҙәр Тапаҡов, яҙыусы



# Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, шағирә, драматург, үҙешмәкәр композитор Зөһрә Хәдит ҡыҙы Фәйзуллина – рух тәрбиәсеһе, әүлиәләр затын дауам иткән ағинәй, ихтирамлы һәм абруйлы кеше. Уның бай тормош юлына байҡау яһау күптәргә көс-ҡеүәт бирер, күп ҡырлы талант эйәһенең эшмәкәрлеген тулыраҡ күҙ алдына баҫтырыр.



**Әҙерләне:**

Мәһәҙиева Венера Рәхимйән ҡыҙы, район үҙәк китапханаһының хеҙмәтләндереү бүлеге мөдире.